Тамара ҒӘНИЕВА

# Бағып белмәҫ, телдән күрер...



Бына ике тиҫтә йыл инде башҡорт милләтен берләштереүсе был баҫманы, халҡыбыҙҙың интеллект кимәле, уй-фекер, кисерештәр даирәһе үҫеше, ҡаҙаныштарыбыҙ хаҡында сығыш яһаусы журналды, тәүге һандарынан уҡып, уның биттәрендә сығыш яһап киләм, шулай уҡ байтаҡ мәғлүмәт эстәп торам. Ошо егерме йыл дауамында үҙемдең дә байтаҡ әҫәрҙәрем — шиғырҙар, проза, тәнҡит мәҡәләләрем абруйлы баҫма биттәрендә донъя күрҙе.

“Ватандаш” иң тәүҙә йәмғиәтебеҙҙәге хәлдәргә битараф булмаған уҡыусыларға һәм авторҙарға йөҙ тота. Бөгөнгө көндә беҙҙе — ҡәләм оҫталарын борсоған иң етди уй-фекерҙәр тел мәсьәләләренә бәйле. Шуға күрә был ҡыҫҡа ғына яҙмамда ла шул мәсьәләләргә ҡағылып үтмәксемен.

“Ватандаш” журналы — республикабыҙ 90-сы йылдарҙа яулаған дәүләт суверенитеты емеше. Баҫма ауыр йылдарҙа барлыҡҡа килде. Хәйер, бөгөнгө хәлдәребеҙ еңелерәкме икән? Суверенитет өсөн көрәш мәлендә, 80—90-сы йылдарҙа телебеҙгә юғалыу янар, тел юғалһа, милләтебеҙ яҙмышы ла юғалыу ҡурҡынысы алдына ҡуйылыр, тигән фекерҙе башына килтерҙеме икән халҡыбыҙ? Һәр хәлдә, унан алдараҡ, XX быуаттың алтмышынсы йылдарында ғына ла әле беҙҙең ауылда русса бөтөнләй белмәгән инәйҙәр бар ине. Инәйҙәр генәме, минең тиҫтерҙәрем мәктәпкә төшкәндә русса бер һүҙ ҙә тиерлек белмәй ине бит. Ә бөгөн? Илебеҙҙә Бөйөк Ватан һуғышынан һуң башланған халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, индустриялаштырыу шарттарында күпләп ҡалаларға күсенгән башҡорттарҙың балалары мәктәптәрҙә русса уҡыу, урамда русса аралашыу арҡаһында телебеҙҙән яҙа башланы һәм быуат аҙағында милли телдән, милли мәҙәниәтебеҙҙән алыҫлашҡан быуын үҫеп сыҡты. Ҡала мәктәптәрендәге мөмкинлектәрҙең ауылдыҡынан арыуыраҡ булыуы шарттарында улар, әлбиттә, белемле, эшһөйәр булып формалашты. Сөнки, билдәле булыуынса, революцияға тиклемге социологик тикшеренеүҙәр үк күрһәтеүенсә, Рәсәй халыҡтары араһында башҡорттар белемгә ынтылыш,

уҡый-яҙа белеү яғынан иң алдынғы урында тороуы менән билдәле. Дөйөм төрки әҙәби телендә донъя күргән китаптар башҡорттарҙың иң төпкөл ауылдары кәштәләрендә лә урын алған. Әйтәйек, беҙҙең яҡтарҙағы Ҡалта (хәҙерге Ҡөйөргәҙе районы) ауылы кешеһе, минең ҡарт олатайым Шәрәфи Аҡъюлов (Бикбаев) рус һәм дөйөм төрки телендәге китаптарҙы уҡыр булған. Барса балаларын да уҡырға-яҙырға өйрәткән.

Йәсәүи Ҡоләхмәттең күзе,
Багып белмәс, телдән күрер
Әйтер сүзне... —

тиеберәк һамаҡлап та алыр була. Тимәк, ул Әхмәт Йәсәүиҙең “Хикмәттәр” китабын уҡыған һәм айырым өлөштәрен ятлап алған. Шулай уҡ: “Әфләтүн (Платон), Сократ хакимдәр әйткән...” — тип һүҙ башларға ла яратҡан. Уның ҡулы менән яҙылған васыят ҡағыҙы ғына ла күп нәмә хаҡында һөйләп тора: “Гакылым сахип, үзем терек аңымда төздүм ошбу васыят кагызымны.

1914 ел апрельнең 8-нче көнендә, Башкорт иле Ырымбур өязенең Ҡалта авылы Шәрәфетдин Даут улы Акьюлов шул хакта: бәндин калмыш 2 угыл һәм 4 кыз варисларымга шәрыйг шәрифемез микдаренча үзләренә тиеш кыйсемләрен айырып бирдем. Беренче угылым Фазлетдин Шәрәфетдин угылына 150 сум, качан да җәмәгать алуп башка чыгарганда расходлары илә 150 сум, ямьгесе 300 сум; икенче угылым Гаязетдин Шәрәфетдин угылына 300 сум. Дүрт кызларыма тиешенчә кыйсемләрен акчалата биреп, ризалыкларын алдум. Ошбуның буенча балаларымдин үтенәм: минем вафатымдин соң, әткәмез һәм әнкәмез илә яңадан мал бүләмез дип, хаким һәм мәхкәмәләрне бимаза кылмаска...”

Артабан ул ҡайһы бер теләктәрен теркәй ҙә волость старостаһынан раҫлата һәм тексты руссаға тәржемә итә.

Тимәк, халҡыбыҙҙың электән үк бик уҡымышлы булыуы хаҡында беҙ ауыҙ тултырып әйтә алабыҙ. Был хаҡта алдараҡҡы быуаттарҙа яҙылған һәм архивтарҙа һаҡланып ҡалған яҙма мираҫтар ҙа һөйләп тора. Шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың айырым милләт булып формалашыуы, төрки донъяһының айырылғыһыҙ өлөшө булыуыбыҙ сәбәпле, дөйөм төрки мәҙәниәтенә индергән өлөшөбөҙ хаҡында үтә ентекле хеҙмәттәр барыбер әлегә етерлек түгел. Милләт мәртәбәһен мәҙәнилек билдәләй. Әммә һуңғы осорҙа ул мәртәбәне ҡорал аша даулап алыу формаһы алға сыға башланы. Милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе ракеталар, бомбалар менән “яйлау” ҡасан да бер туҡтатылыуы ла ихтимал. Әммә, минең ҡара аҡылым аңлауынса, бындай гуманлылыҡҡа тик гуманитарийҙар ғына сик ҡуя алыр ине. Нәҡ дөйөм кешелектең аҡыллы баштарының берҙәмлеге генә ил етәкселәренә бармаҡ янарға хоҡуҡ яулаһын ине. “Етте, тыйылығыҙ! Берәүҙең берәүҙе үлтереүҙән иркенлеккә сыға алғаны юҡ әле!” — тип әйтә алыу хоҡуғына өлгәшһен ине халыҡтар үҙҙәре лә.

Ҡеше киләсәккә ҡарап йәшәргә тейеш. Ҡешелек тарихы ярайһы яҡшы өйрәнелгән, әммә унда ғәҙелһеҙлектәр ҙә етерлек. Европа, Яҡын Көнсығыш тарихы XX быуат башында ентекле күҙәтелеп сыҡҡан булһа, Сыңғыҙ ханға тиклем Үҙәк Азия далаларында ғүмер итеп, үҙ дәүләтен төҙөүгә өлгәшкән

һәм ҡанһыратылған һундар һәм боронғо төркиҙәрҙең яҙмышы беҙҙең хрестоматик дәреслектәрҙән ситтә ҡала килә. Йәнә, тарих дәреслектәрендәге бер яҙыҡ аңлашылып бөтмәй миңә. Монголдарҙы әйтәм. Монголия менән Мәскәү кенәзлеге араһы 6 мең километр. Монголдарҙың сиреүе һыбай юлға сыҡты, ти. Себер, Урал тауҙары аша килгәндәр, тип фараз итһәк, юл буйында бит бер ниндәй ҙә ил, ҡала, ауылдар юҡ. Сиреү нимә менән туҡланды икән? Аттар, мал-тыуар нимә ашаған һуң? Ҡыш көнө бигерәк тә ауыр бит меңәр саҡрым юл буйлап килә ятыу. Етмәһә, маршрут та аныҡ булмағандыр әле. Мәғлүмәтле булғандар, тиһәң... Монголдарҙың донъя мәҙәниәтен таң ҡалдырған матди ҙа, рухи ҙа ҡаҙаныштары билдәле түгел. Төркиҙәр иһә бай мәҙәниәтле, тарихта юғалмаçлыҡ эҙ ҡалдырған ҡәүем бит. VI быуатта Төрки ҡағанаты сиктәре көнбайыштан — Византия, көньяҡтан — Иран һәм Һиндостан, ә көнсығыштан Ҡытай менән сикләнгән була. Ҡытайҙар ҙа, Византия ла Константинополь баҙарында сауҙа аралашсыһы төркиҙәр менән яҡшы мөнәсәбәт ҡорорға һәм уларҙың талаптарына ҡолаҡ һалырға мәжбүр була. Шул уҡ ваҡытта төркиҙәр атап кителгән дәүләттәр культураһына ҡаршы торорлоҡ үҙ культураһын да булдыра.

604 йылда Көнсығыш һәм Көнбайыш төрки ҡағанаттары тарҡала. Халыҡтың бер өлөшө даланың яңы хакимдары — уйғырҙар ҡулына күсә. Икенсеһе Ҡытай империяһы эсенә инеп юғала. Билге хандың тол ҡатыны, Төнюҡуҡ хандың ҡыҙы По-бег етәкләй уларҙы. По-бегка ҡытайҙар юғары титул бирә. Кешеләрен һаҡлап ҡалһа ла, халҡын һаҡлап ҡала алмай шул ханбикә, төркиҙәр табғастар эсенә ҡом кеүек һеңә. Дөрөç, 756 йылда Тан династияһына ҡаршы баш күтәреп ҡарайҙар, әммә ҡытайҙар тарафынан тураҡланалар ғына. Донъя аренаһында төрки атамаһы һаҡланып ҡала барыбер һәм тел ғаиләһен билдәләүсе терминға әүерелә.

Үҙҙәрен Күк төркиҙәре тип йөрөткән халыҡтың мәҙәни мираçы араһында иң күренеклеһе — “Ҡол-Тиген” таштары. Уның емереклектәренә 1889 йылда Н.М.Ядринцев барып юлыға, таштарҙы 1891 йылда В.В.Радлов өйрәнә. 1958 йылда Монголия Халыҡ Республикаһы археологтары менән берлектә уҙғарылған экспедицияла ҡатнашыусы чех археологы Йиел тарафынан ентекле тикшерелеп уҡыла. Мин иһә уның Ҙур ташындағы дастанды башҡортсаға ауҙарғайным. (Мәүлит Ямалетдиновтың да тәржемәһе бар).

...Күк төркиҙәр ғүмер һөргән далаларҙа,
Бейле булған, нигеҙ һалған ҡалаларға.
Алмаштырған бер батырҙы икенсеһе.
Тәхет күскән аҡыллынан аҡыллыға,
Халҡы өсөн яҡшы ҡанун яҙа-яҙа,
Йола-ғәҙәт нығытҡандар бик күп йылға.
Бейҙәр, халыҡ тоғро булған хакимдарға,
Хыянатһыҙ ҡағанатҡа, йолаларға.
Ҡағандар ҙа бер көн килеп ерҙән үткән,
Терелләргә етеш тормош биреп киткән.

Шул рәүешле, бөгөнгө күп һанлы төрки телле халыҡтар өсөн тарих сөңгөлдәренә инеп юғалған төркиҙәр мираç итеп руник таш яҙмалар ҡалдырған.

Ни өсөн уратыбыраҡ та, бер аҙ тарҡауыраҡ та итеп һөйләйем был хаҡта? Үҙебеҙҙең ҡаҙаныштарыбыҙҙы юғалтыуға, булғандарына вайымһыҙыраҡ ҡарай башлауыбыҙға әсенеүемдән, әлбиттә. “Ҡол-Тиген” дастаны, шулай уҡ боронғо төрки теле, төрки руник алфавиты мәктәп дәреслектәренә инергә тейештер ул, тигән фекерҙе лә әйтмәксемен. Кем икәнебеҙҙе аңлау юлына баҫҡанда, телдән телгә күсеп, беҙҙең көндәргә килеп еткән фольклорыбыҙ менән бер рәттән мөғжизә сүрәтендә һаҡланып ҡалған яҙма әҙәбиәтебеҙгә битараф булмайыҡ беҙ. Беҙҙеке тип иғлан итәйек, ояты юҡ, уғрылыҡ та түгел был, ә үҙебеҙҙең ҡомартҡыларыбыҙға, боронғо тарихыбыҙға үҙебеҙ хужа булырға бурыслыбыҙ, тигәнде генә аңлата. Һәр саҡ яҙма, ташҡа баҫылған һүҙгә хөрмәт менән ҡарау — беҙҙең милләтебеҙҙең төп мәртәбәһе лә баһа.

Журнал киләһе йылдарҙа боронғо төрки яҙмаһын пропагандалау эшен үҙ өҫтөнә алһа, бигерәк тә ҡыуаныслы булыр ине. Датаһы билдәле бит: “Ҡол-Тиген” дастаны 604 йылда ташҡа уйып яҙылған.

...Күк Тәңребеҙ менән Ер Тәңребеҙ
Бойорҙолар:
“Хаҡығыҙ юҡ юғалырға!
Тере булһын ырыуығыҙ, халҡы — бөтөн!” —
Фарман килде төркиҙәргә бар булырға.
Илтырыш ҡаған миңә атай ине,
Әсәй ине миңә Илбилге ҡатын.
Батырлыҡҡа Күк Тәңренән ҡөҙрәт алып,
Йәшәүгә көс йыйған шулай минең затым.

